## ВАҠЫТ

Ваҡыт ул — мәңгелек ел-дауыл,
Ер шарын, ғаләмде урар ул.
Ваҡыт ул — йәшәйеш һулышы,
Донъяның ғәжәйеп булмышы.
Ваҡыт ул — тынғыһыҙ, тыйғыһыҙ,
Йәне бар һис тынып торғоһоҙ.
Ваҡыт ул — үҙенсә бер ярыш,
Тауҙаймы эшең, йә бер ҡарыш.
Ваҡыт ул — серле бер йомғаҡтай,
Асыҡ та, йомоҡ та йомаҡтай.
Ваҡыт ул — туҡталмаҫ бер карап,
Елдерә гел алга ул ҡарап.

## БӨТӘ НӘМӘ АЛҒА ТӨБӘЛГӘН

Бөтә нәмә алға төбәлгән:
Олатайҙан ҡалған уҡ һәм йыр;
Һыу ҙа тауҙан алга тәгәрләй,
Алга илтә хатта урау юл.
Туймай донъя, туймай тиҙлеккә,
Тиҙме тиҙлек беҙҙең күҙлектән?
Ҡулдарымда — толпар теҙгене,
Уйҙарымда — йондоҙ тиҙлеге.

## АЛЬПИНИСТӘР ЙЫРЫ

Ҡояшта ҡыҙынып,
Ныуыҡта сыныҡып,
Ҡоростай
Нығытып
Ҡулдарҙы,
Үрләйбеҙ беҙ күккә,
Бейектән-бейеккә
һалабыҙ
Иң текә
Юлдарҙы.
Беҙ яҡын менәбеҙ
Ҡояштың үҙенә
Ҡыйыулыҡ тамғаһы —
Альпинист эҙендә.
Артылып тауҙарға,
Етһәк тә ҡайҙарға,
Илдең беҙ
Ҡарашын
Тоябыҙ;
Бик бейек ерҙәрҙә,
Дауылдан, елдәрҙән
Иң ныгын
Дуҫлыҡтың
Ҡоябыҙ.
Беҙ яҡын менәбеҙ
Ҡояштың үҙенә,
Ҡыйыулыҡ саҡкыһы —
Альпинист эҙендә.

## ҺАУМЫҺЫҒЫҘ, ЯҘҘАР!

Һаумыһығыҙ, яҙҙар,
яҡты айҙар,
яҡты көндәр,
яҡты хыялдар!..
Һеҙ бит — күктән аҡкош булып
теҙелешеп уҙып барған

ал яулыҡлы
аҡ һылыуҙар,
аҡ йондоҙҙар!

Эй һеҙ, яҙҙар, яҙғы наҙҙар!
Ҡарағыҙсы,
беҙҙең күҙҙәр, беҙҙең йөҙҙәр
Һеҙҙе һөйөп тәбрикләйҙәр,
хатта беҙҙең ҡырыҫ елдәр,
һеҙҙе күреп, шыбырҙайҙар
иркә һүҙҙәр.
Яҙғы айҙар,
яҙғы көндәр, яҙғы төндәр,
ашыҡмағыҙ әле улай;
ер-һыуҙарҙы урай-урай,
үткән саҡта Урал аша
ҡылһағыҙсы бер тамаша:
был тауҙарҙа, далаларҙа
ерҙән алып күккә ҡәҙәр
күтәрелгән бер бәһлеүән,
Башҡортостан — ул аҫыл йән.

Күкрәгендә был батырҙың
күкрәп торған көстәр ята,
янартауҙай һүнмәй торған
икһеҙ-сикһеҙ хистәр ята.
Ашыҡмағыҙ, аҡҡоштарым!
Талғын-талғын елпеп ҡанат,
уҙығыҙ һеҙ Урал аша,
Уралтау ҙа, һеҙҙе күреп,
ҡылһын әйҙә бер тамаша.

Аҡ ҡоштарым,
аҡ ҡыштарҙы
йәшел мәлгә тоташтырып,
яҙ килтергән, наҙ килтергән
пак ҡоштарым —
теҙелешеп уҙып бара,
һауаларҙа был айҙарҙа
өр-яңы йыр һуҙылып бара.

Юҡ-юҡ,
берүк, һеҙгә, кешеләрем,
булмаһын ул аҡкош йыры,
булһын бары: «Яҙ!»,
«Яҙ!» — тиеп,
ай-аҡ ҡышты наҙлы яҙға
тоташтырған
паклыҡ йыры,
күңелдәргә ҡанат ҡуйыр
шатлыҡ йыры,
шатлыҡ йыры.

## МИН ДАЛАЛА ТЫУҘЫМ

Ауылдаштарыма

Мин даланан килдем ҡалаға,
Ә йөрәгем йәшәй далала;
Сәңгелдәгем, моңом" — сал дала,
Далаларҙа йәнем һаҡлана.

Ҡарт даламдың утлы ҡояшын,
Меңәр йыллыҡ дарья һағышын
Күкрәгемә һалып килтерҙем,
Күкрәүҙәрҙе алып, мин килдем.

Яланымдың йәйғор төҫтәрен,
Томраларын, әрем еҫтәрен
Алып килдем шаулы ҡалаға,
Ә табынам һаман далаға
.
Дала ирке ингән уйыма,
Дала күрке һеңгән йырыма,
Мин далала тыуҙым, далала,
Дала рухы йәшәй ҡалала.

### ҠЫЛҒАНДАР

Ҡылғандар, ҡылғандар,
Далаға тулғандар,
Сәстәрен ҡояшҡа
Тағатып ҡуйғандар.

Ел үрә, ел һүтә
Толомон ҡылғандың,
Елкетә, елкетә
Яланда тыуған моң.

Сал сәстәр, сал төҫтәр —
Ерҙең саф һағышы,
Сәңгелдәк көйөндәй
Тыуған ер тауышы.

### МАЙ АЙЫ

Килеп етте, елеп етте
Ал байраҡлы май айы,
Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең
Шатлыҡтарға бай айы;
Эй май айы, май айы!
Шундай ихлас күктә ҡояш,
Йөҙө, гүйә, һары май,
Көн буйына ерҙе һөйөп,
Йылмая ул арымай;
Эй яҡты ай, яҡты май!
Майға ҡарап, айға ҡарап,
Кейенә ер йәшелдән,
Йәшел үлән өҫтәрендә
Иркәләнә йәш елдәр;
Эй йәшел ай, йәшел май!
Ошо айҙа туғайҙарҙа
Моң тибрәтә һандуғас,
Ниндәйен ҙур бәхет бит был,
Һандуғаслы яҙ тыуғас;
Эй наҙлы ай, наҙлы май!

Ең һыҙғанып, йөрөй был ай
Яландарҙа, ҡырҙарҙа,
Уңғанлығы менән оҡшаш

Беҙҙең эшсән ҡыҙҙарға;
Эй матур ай, матур май!

## УРАЛЫМДЫҢ АҒЫН КЫУҘАРЫ

### Йылғасығым

Шарлап аға кескәй йылға,
Уйынсыҡтай,
Уйым-уйым шарламалар,
Тап орсоҡтай,
Зыр әйләнеп, бер туҡтауһыҙ
Уйнап тора,
Йылғасығым, йырсы ҡыҙҙай,
Йырлап тора.
Ҡарағыҙсы, зәңгәр күктә
Алтын ҡылдар
Ныу өҫтөнән ҡояшҡаса
Тартылғандар.
Дәртләнешеп уйнай елдәр —
Тилбер ҡулдар,
һауаларым, ерем тулы
Моңдар, моңдар,
Уйнағас ни, ҡояш нурын
Көйгә һалып,
Ерҙә һыуҙар йырлап аға,
Аға ярһып.

### Уй

Уй һыуҙары аға уйһыуҙарҙан,
Уйылып ҡына ҡалған уй һымаҡ;
Булырмы ла ерҙә, ай, булырмы
Уйсан йылға тағы Уй һымаҡ.

Уйҙарыңды тартһа Уй буйҙары,
Урау-урау илде урарһың,
Уралҡайҙың уйҙар булып аҡкан
Сал тарихен уйлап йырларһың.

### Дим

Йәйге көндә Дим өҫтөндә
Уйнай шат ҡояш;
Ниндәй рәхәт, ниндәй һәйбәт,
Ҡояш балҡығас.
Иркен туғайҙар,
Шундай киң һауа!
Күктең бар нуры
Еремә яуа.
Әллә инде ысын көмөш
Һыуы был Димдең,
йыйғанмы ул йылылығын,
Наҙын илемдең.
Донъялар матур,
Күгем киң минең,
Мәңгелек йырға
Димем тиң минең.

**Өршәгем**

Ялан ерҙе ярып ҡап уртаға,
Төньяғына уҡтай тартылып,
Өршәк-йылға аға талғын ғына
Бөгөлөргә хатта тартынып.

Толомдары һымаҡ һылыу ҡыҙҙың,
Талдар, туғайлыҡтар һуҙылған;
Ян-яғына, көмөш тәңкә булып,
Йоморо-Йоморо күлдәр уйылған.

Йәйрәп ята йәшел диңгеҙ бында —
Икһеҙ-сикһеҙ ҡырҙар, баҫыуҙар,
Байкал-күлгә тиңдер тәрәнлектә
Күкте түшәп ятҡан ятыуҙар.
Эй Өршәгем минең, татыр һыуың
Татлы күрәм юкә балдан да;
Ҡан тамыры итеп, һинеме әллә
Йөрәгемә уйып һалғандар.

**Стәрле**

Стәрлекәй, селтәрлекәй,
Селтер-селтер һыуҙары,
Гөлбаҡсалай балҡып тора
Стәрлеһыу буйҙары.

Стәрлекәй, селтәрлекәй,
Ярҙан-ярға баҫмаһы;
Йәшел ялан өҫтәрендә —
Ерҙең аҫыл таҫмаһы.

**Эҫемкәйем, Эҫемем**

Уралымда бер йылға бар —
Эҫеме ул, Эҫемме?
Халҡым ҡайҙан тапты икән
Быңдай серле исемде!
Серҙәре күп әле ерҙең
Беҙгә — шуны сисергә,
Тыуған яҡта шишмәләрҙән
Ятып һыуҙар эсергә.
Алҡын һыуым, һалҡын һыуым,
Эҫемкәйем, Эҫемем,
Телден тере бер тамсыһы —
Исемкәйең, исемең.

**Арғымаҡ** [1]

(Михаил Садовскийҙән)

Тәрәндә, йырында
Юрғалай, атлыға
Кескенә бер йылға —
Ул йылғыр Арғымаҡ.
Арғымаҡ буйында

---

[1] А р ғ ы м а ҡ — Башҡортостандың Дүртөйлө районындағы йылға исеме.

Тал ғына, тал ғына;
Һап-һалҡын һыуҙары
Һыуһынды ҡандыра.
Аға ул урғылып,
Яғымлы йыр булып: —
Әйҙәгеҙ, кинәнеп
Эсегеҙ һыуымды,
Мин һеҙгә йырлармын
Иң яҡшы йырымды.
Мин хеҙмәт итәмен кешегә,
Ат һымаҡ, тоғромон эшемә.
Кем минең буйымдан
Талмайса югерә,
Оҙатып ҡуйырмын
Уны мин Иҙелгә!